МОСТАЙ КӘРИМ

# ЯҘҒЫ ТАУЫШТАР

БАШГОСИЗДАТ
1941

С(Баш)
К 97

МОСТАЙ КӘРИМ

# ЯҘҒЫ ТАУЫШТАР

(ШИҒЫРҘАР)

66757

*БАШГОСИЗДАТ*
*Художество әҙәбиәте секторы*
*Өфө—1941*

## ЯҘҒЫ ТАУЫШ

Таныш моңдоң, бәлки, меңенсе кат
Яңғырауы булыр ошо йыр,
Тик беләм,
Ул яҙғы операға
Бер ария булып кушылыр.

Күңел яҙҙы һөйә шунының өсөн—
Ул өр яңы йәшәү уята,
Яҙын тауҙа тәүге сәскә ата,
Һәм кәкүккә яңы моң кайта.

Йәшәү бәхтен йырҙарына койоп,
Турғай оя үрә тәүге кат,
Эш симфонияһына кереш уйнай
Уйһыулыкта киске хоровод.

Яратам мин күмәк хеҙмәт яҙын,
Кымыҙ кеүек татлы һауаһын,
Ергә йылы ямғыр һибәләгән
Болоттарҙың алтын канатын.

Йәшлек биргән һәр бер йөрәк менән

Уртаклашам күңлем шатлығын:
О, күгәрсен, һинең мөхәббәткә
Яҙ гөлдәре бирһен сафлығын.

(Тик кисер, яҙ,
Был йыр бағышланмай
Курсағына бәйһеҙ хистәрҙең,
Былбылына бульвар һөйөүенең,
Коҙғонона айлы кистәрҙең).

Таныш моңдоң, бәлки, меңенсе кат
Яңғырауы булыр ошо йыр,
Тик беләм,
Ул яҙғы операға
Бер ария булып кушылыр.

1940

## ТЫУҒАН ЕРҘӘ

I

Һағыныу хисе миңә канат куйып.
Алыҫ ерҙе якын иттерҙе,
Мин илемә кайттым,
Тыуған илгә,
Күленә кайткан аккош шикелле.
Уҙған ғөмөр төҫлө боролма юл,
Күкшелләнгән тауҙар тулкыны,
Һары океан—бешкән башак еҫе,
Куйы урман, убыр упкыны
Әсәй кулы кеүек, якын миңә,
Таныш бында миңә һәр кыуак,
Был ерҙәрҙә, аунап көсөк һымак,
Ғәмһеҙ үтте минең баласак.

II

Комдан уҙған йылан эҙе кеүек,
Баҫыуҙарҙы йырып, юл килә,
Юл буйында
Урман үгәйһеткән

Япа-яңғыҙ кайын эйелә.
Хәтерләйем, кояшлы күҙ ине
Мин ауылдан киткән сағында,
Үкһей-үкһей әсәй оҙата килде,
Беҙ туктаныҡ кайын янында.
Күләгәләр япты уның йөҙөн,
Кояш ингән кеүек болотка,
Йәшкә кушып үпте күҙҙәремде:
— Бәхетле бул, беҙҙе онотма...
Яулыҡ осон сәйнәп калды әсәй,
Карт кайынға һалып беләген,
Мин—таш бәғер
Ул сак аңламаным
Улын һөйгән әсә йөрәген...
Ғәмһеҙ атлап киттем.
Бөгөн тағы туған кырҙарымдың
Тупрағына баҫып киләм мин,
Ләкин инде донъя матурлығын,
Тормош тәрәнлеген беләм мин.

III

Һағыныу хисе миңә канат куйҙы,
Якты уйҙар оҙата барҙылар,
Бына хәҙер
Бер ояла үҫкән
Иҫке дуҫтар каршы алдылар.
Атай—
Һаман ата арыҫлан ул,

Башҡа ерҙә ташты илата,
Әсәй—
Әүәлгесә, ҡайғыһын да,
Шатлығын да йәшкә сылата.
Ләкин улар төнө айһыҙ түгел,
Тик аҙанһыҙ тыуа иртәһе,
Улар менән
Беҙҙең крейсерҙың
Кешелекте ҡайҙа илтәһен.

1939

---

## ТАҢ ИНЕ

(Баллада)

Яҙғы һалкынса таң ине,
Аяҙ ине күк йөҙө,
Ай көмөш тәнкәләр сөйҙө;
Алыҫ бушлыкта ағарып,
Балкыны таң йондоҙо.

Каршымда уҫак япрактары
Талғын ғына саба кул,
Кара таҫма шикелле юл
Һуҙыла. Ә яр аҫтында
Томан бөркөй тыныс күл.

Мин юлсы. Тыуған еремдең
Май таңына һокланып,
Ебәк теҙгенемде кағып,
Үреп арғамактың ялын,
Тын киләм уйға талып.

Ҡапыл ишетәм, янымда
Йәш камыштар баш какты,

Шул вакыт ялан аяклы,
Куркыныс туҙылған сәсле
Бер шәүлә күлгә ятты.

Ул бары эске күлдәктән,
Тик шәл һалған иңенә
(Һокландым нескә биленә)
Ә үҙе, шашкан шикелле,
Тар һукмактан йөгөрә.

Кем һуң был? Әллә Пушкиндың
Акулинаһы кеүек,
Кайнар күҙ йәштәрен түгеп,
Киләме? Әллә, кайын төбөндә
Көтәме гүзәл егет?

Әллә айҙағы Зөһрә-кыҙ
Калдырып пар силәген,
Шәлгә төрөп ай бүләген,
Төшкәнме ергә—иреккә,
Эҙләп һөйгән сибәрен?

Әллә бәхетһеҙ һыу кыҙы
Сәсен туҙҙырып шулай,
Урланған тарағын юллай,
Тилереп тик бер яңғыҙы
Йөгөрөп күлде буйлай?

Бәлки,

Ағыулы үбеүҙе татып,
Тәүге емеш өлгөргәс,
Һәм ялған мөхәббәт һүнгәс,
Урланған намыҫ тапталып,
Йөрәген оят күмгәс,

Өмөтө һүнгән йәш әсә
Ярһынып һуңғы кабат,
Күлдең тәрәнлеген карап
Йөрөйҙөр. Бына ул үлер,
Шаһит мин һәм арғамак.

Таң ялкынына төрөнөп,
Һаман алға йөгөрә,
Оҙон сәстәре һибелә,
Ергә ысын йәшәү килгәндә
Ул һыуға төшөп үлә.

Юк, юк ул үлмәҫкә тейеш:
Шундай гүзәл күлдәрҙе,
Баксаһындағы гөлдәрҙе,
Яңы бәхет килтереүсе
Таңдарҙы һәм көндәрҙе

Ул ташлап китмәҫкә тейеш—
Нисек күҙ йомоп калам?
Мин ул матурҙы коткарам—
Арғамакты кире бороп
Кыҙҙың артынан сабам.

Һикертеп барып етәм дә:
— Һеҙ минән куркмағыҙ,—тим,—
Саф һыуҙы болғатмағыҙ,
Алтындан киммәт ғөмөрҙө
Һеҙ убып юғалтмағыҙ...

Тынысланығыҙ, һылыуым,
Кәһәрле асыу бөтөр.
Зәһәрле әрнеү ҙә үтер,
Һеҙ тормошка килерһегеҙ—
Таң артында якты көн.
Башта һиҫкәнде кыҙыкай,
Оялды, ғәжәпләнде,
Күкрәген шәленә төрҙө,
Сихырлы күҙҙәрен тегәп,
Карап торҙо ла көлдө:

— Һеҙ нәмә һөйләйһегеҙҙер,
Мин, егет, аңламаймын,
Тик мин үлергә килмәнем,
Кисерегеҙ... Мин ашығыс...
Һеҙ осорар тип белмәнем.

— Ғәфеү итегеҙ, егеткәй,
Һөйләшергә вакыт тар,
Эшләй торған ҙур эшем бар.
Мин борсолдом. „Матурым, һин
Кайҙа былай?—әйт зинһар!“
Матур кыҙ башта үҙенең

Баксасы икәнен әйтте,
Ә унан кайҙа барыуын
Ашығып һөйләп китте:

— Уянһам, таң, һалкын...
Бөгөн кырау төшәсәк,
Йәшелсә баксам бөтәсәк,
Әгәр өйөлгән һаламды
Килеп төтөн итмәһәк.

Түтәлдәрҙең артындағы
Анау өйөм һаламға
Барып ут кына һалам да,
Әгәр иренмәй көтһәгеҙ,
Килермен һеҙҙең янға.

Ул китте. Эйәр өҫтөндә
Кыҙыйҙы карап калдым.
Бөгөн дә шул якты таңды
Һәм һөйөклө ил кыҙын мин
Яңынан иҫкә алдым

1939

---

Когда волнует горе, не
говори, что счастья нет.
Волнуется ведь часто море,
Но ветер стих и буря нет

## ТӨН ТУРАҺЫНДА УЙ

I

Ай йөҙ түбән ятып ерҙе күҙләй,
Урамдарға тынлык тарала,
Тойғоларға тулы хокук биреп,
Төн карарға сыктым калаға.

Бына асфальт, бағаналар, уттар...
Мин уларҙың бер йәш хужаһы,
Мин улы был ерҙең, һәр өй менән
Косаклашып килә уҙаһым.

Төн. Сирендәр керпек асыр өсөн
Йокомһорап таңды көтәләр.
Ә тополдәр кала хакындағы
Легенданы такмак итәләр.

II

„Был—тормошһоҙ кыраҕай урман
булҕан,
Тик бөркөттәр куян аулаҕан,
Иҙел иңерәп аккан, һәм кайындар
Канаттарын йәйеп шаулаҕан.

Йылдар шулай шыңшып һуҙылҕандар,
Кыштар яңы яҙҙар килтергән,
Кеше тигән бик ҙур архитектор
Был тауҙарҙа кала күтәргән.

Ләкин бында кешелеккә—төрмә,
Акылдарҕа—сыңлы манара,
Ауыр быҕау булҕан кыйыулыкка,
Кәүҙәләргә—епле баҕана“.

III

Төн. Тынлыкка һеңеп был урында

Монашкалар гимны һузылған,
Шундай төндә башкорт аркаһынан
Камсы үрергә кайыш һуйылған.

Төн. Бындай төн, бәлки, күҙләгәндер
Был ерҙәрҙә Ленин атлауын;
Төн. Был төндәр хәтерләтә миңә
Чапай туптарының шартлауын.

IV

Мин йокоһоҙ һаташыуҙан айнып,
Май төнө һәм Өфө хакында,
Йәшәү кеүек, татлы уйға сумып,
Баҫып торам урам сатында.

Хәлһеҙләнеп алыҫ йондоҙ һүнә,
Айҙан һуңғы нурҙар түгелә,
Кыҙыл диңгеҙ булып, таң йәйелә,
Республика һәм кала күгенә.

1939.

# ОСОРАШЫУҘАР

Кем дуҫлығы өҫөн һәйкәл икән
Аллеяла үҫкән пар ҡайын?
Тойғоларға ялҡын биреүсене
Осраттым мин шунда көн һайын.
Был бер ҡатлы йәшлек яныуымы?
Хистәр дулауымы?
Юк, түгел,
Ул күбәләк булһа,
Ҡуныр өсөн
Мин гөл булыр инем,
Эйе, гөл.
Ул күрмәһә, йотолам,
Ул ҡараһа,
Ирекһеҙҙән ситкә борола баш,
Ниндәй ҙур ялҡынды һүндерәсәк,
Әгәр боҙло булһа ул ҡараш.
Уны уйлау бәхтен үлтереү
Аҙмы үкенес, ғазап килтерер?!

* * *

Күк ситендә бешкән миләш төҫө;

Көн шау-шыуын йота тын урам,
Уҙған минуттарға хисап биреп,
Мин бүлмәлә яңғыҙ ултырам.
Әллә көтәм шулай яҡыныңды?
Яҡыныңды әллә оҙаттым?
Беренсе ҡат уйҙар тотҡоно мин,
Ах, үҙемде, ахры, юғалттым.
Сеү...
Тәҙрәгә килә таныш һын,
Тышҡа саҡырып болғай ул ҡулын,
Тәҙрә асам,
Унда сирень күле,
Күл тәҙрәгә ҡаға тулҡынын.
Төндөң ҡуйынынан ҡасҡан һымаҡ,
Тығыҙ һауа өйгә атлыға,
Нурҙар диңгеҙендә уйнап үскән
Күбәләктәр һибелә яҡтыға.
— Күбәләктәр,
Һеҙ әйтегеҙ әле,
Мин осратҡан теге гүзәл ҡыҙ
Әллә һеҙҙең батша инеме ул?
Күбәләктәр өнһөҙ, яуапһыҙ.
Күбәләктәр һөйә яҡтыны,
Был кис — яңғыҙлыҡтың аҡтығы.

***

Мин уйҙарҙан айнып,
Ғәмһеҙ генә

Эштән кайта инем кис менән,
Капыл эфир әйтте:
— Куктә тревога!
Ә гудоктар һауа киҫтеләр.
Бер минутка калтыранды урам,
Һоро тетен ятты таштарға,
Постовойҙар юл курһәтте миңә
Таш подвалға карай атларға.
Куптән серле булған куҙҙәр менән
Осораштык беҙ ошо урында,
Һәм йөҙҙәргә тынысһыҙлык сыкты:
— Тревогамы?
— Эйе, тревога.
Теләктәрҙе караштарҙа сәстек,
Теләктәргә һуҙҙәр ялғанды.
Вакыт һанһыҙ,
Тик һуңынан белдек
Беҙ икәуҙән икәу калғанды,
Куптән уҙған ине тревога.
Тышка сыктык,
Зәңгәр еләҫлектә
Елбәҙәген коя ак муйыл,
Һәм бына беҙ бергә атлап киттек,
„Ыңғай“ булып сыкты барыр юл.
Егет йөрәгенең яныуы
Кыҙ иренендә табыр дарыуын.

1940

## АЙ ЮЛЫ

Тормошта ла кай берәүҙәр
Үтә алмайҙар ярҙан.
Көнләшмә һин уларҙан.

Тынғыһыҙ диңгеҙҙең өҫтөн
Ай юлы киләярып,
Кужал, иркәм, вакыт етте,
Ташлайык диңгеҙ ярын.

Яр башында, тулкын һанап,
Йөрөнөк һинең менән.
Күрәйек диңгеҙ киңлеген,
Күрәйек күңел менән.

Ай юлы буйлап китәйек,
Кул бирәм һиң иркәмә,
Айкалһын әйҙә тулкындар,
Сайкалһын әйҙә кәмә.

Диңгеҙ—сикһеҙ зәңгәр бәллеү,
Ай юлы йырак, йырак...
Ул барған һайын киңерәк,
Яктырак һәм яктырак...

1940.

## БАЛАЛЫК

Зәңгәр колонналар булып,
Барабан кағып,
Колхоз урамдары буйлап
Уҙған балалык,
Костерлы дозор төндәре,
Тәүге хиялдар,
Татыу семья, әкиәт булып,
Йәшәлгән йылдар,
Һеҙ калдырҙығыҙ йөрәктә
Якты иҫтәлек,
Һеҙгә йыр менән бурыслы
Йырлаусы йәшлек.
Башка колоннала үтә
Шул ук балалык,
Беҙҙең кулда елберҙәгән
Байракты алып,
Мин һеҙҙә күрәм үҙемде,
Бәхетле током,
Сөнки һаклап киләһегеҙ
Ысын йәшәү утын!

1940.

## ДАҺИ ТЕЛМӘРЕ

(1939, 10 март)

Яктылығы мең метеорға тиңдәш,
Бөйөклөктә Эверест шикелле,
Киңлек менән Бөйөк Океан кеүек,
Мәскәүле һәм титан кешеле
Илем тора...
Капыл эфир тулкын сәсте,
Аякка баҫты халык,
Шауланы ауыл, калалар,
Һәм тағы тынға калып,
Шымып торҙо.
Үтте был тулкын даланы,
Бейек тауҙарҙы гизде,
Кисте был тулкын урманды,
Кисте тулкын диңгеҙҙе.
Бына алыҫ Һиндиялә
Бер ас кол ыңғыраша,
Юк, ул хәҙер туктаны ла,
Карап күк тауҙар аша,
Тыңлап торҙо.
Һары диңгеҙ буйындағы

Сынйырланған Ыласын
Тимер тәҙрәгә капланды
Эфирҙы тыңлар өсөн.
Һөйөнә негр, Ниленә
Мул ташыу инген кеүек,
Йылмая ненец, иленә
Кояшы килгән кеүек.
Донъя трибунаһы һөйләй,
Аякка басты халык,
Тыңлай ул оло дөрөслөк,
Тыңлай ул таңға калып.

1939

---

## ЙЫР

Себер тигеҙлеге буйлап
Которҙо буран,
Ғөмөрөн еңеүле итеп,
Үтте партизан.

Үтте партизан тайганы,
Аҫып винтовка,
Бойокманы йәш партизан
Ташланды утка.

Кисте отряд Байкалды—
Юл булды оҙон.
Яратты шунда партизан
Бер бурәт кыҙын.

Үлемгә лә, еңеүгә лә
Бергә килделәр,
Һуңғы һынык сухарейҙы
Икәү бүлделәр.

Таҙарткас самурайҙарҙан
Был изге ерҙе,
Ул ватан итте үҙенә
Алыҫ себерҙе.

Башта һағынды Уралын,
Унан иләште,
Сөнки һөйҙө ул Байкалды,
Һылыу кәләште.

1939

---

## АЙЫРЫЛЫУ

Көнбатышка якынлашкан кояш
Миңә һуҙа һуңғы нурҙарын,
Елдәр...
Йәйге елдәр тулкынлата
Каршымдағы кайын урманын,
Карап калдым,
Доң... доң... саң кағылды,
Тәгәрмәстәр такмак башланы,
Эх, землемер,
Алыҫ сакрымдарың
Араларға колас ташланы.
Ул йәшенде,
Ә мин карап калдым,
Бакса коймаһына һөйәлеп,
Ләкин хистәр, ярһыу хистәр китте
Уның вагонына эйәреп.
Борсолоуҙан муйын сак бөгөлмәй
Каты һағыш тырнай күңелде.
Китеүеме кыйын, оҙатыумы?—
Әйт, һандуғас!
Таныш түгелме?
Бер минутка шундай ауыр уйҙар,

Ауыр уйҙар, мине талдырҙы,
Ниңә бошонорға?
Ул бит миңә татлы үбеүен дә
Кайнар һөйөүен дә калдырҙы.
Ул алыҫка китте,
Киң кырҙарға,
Бергә үҫкән шаулы каланан,
Һағынһам да түҙәм,
Сөнки уның
Тормош юлы шулай караған.
Биләп торор иркәм йөрәгемдең
Башкаларға ят бер өлөшөн,
Һәм кайтыр ул,
Ә һуң ул сағында
Артык кыҙык булыр күрешеү...

1938

***

Иҫке йылдың иҫтәлеге итеп,
Дуҫтар миңә букет килтерҙе,
Биҙәкле ине, кисергән хис төҫлө,
Янып һүнгән көндәр шикелле.
Декабрҙә яҙ гөлдәрен тотоп,
Йәшлек керҙе көлөп ишектән,
Һәм күкрәүсе, дуҫлык исменә мин
Ялтырауһыҙ дан, мактау ишетәм.
Шиңмәҫ гөлдө төрөп хистәргә,

Вәғҙә итәм йөрәк дуҫтарға:
Йәшәү—ижад,
Ижад—йәшәү тәме,
Мин ижадым өсөн янырмын,
Асеевтар Иҙел булып ташһа,
Мин Дим булып кушылып ағырмын.
Өй алдында төн куйыра һаман,
Кар койола күкте томалап,
Ә һеҙ
Байрам өҫтәленең артына
Ултырығыҙ, дуҫтар,
Оҙамаҫ
Иҫке йылдың һуңғы минуттарын
Гимн уйнап Мәскәү оҙатыр,
Күрелмәгән подвиг вәғҙә итеп,
Аренаға сығыр йәш батыр.
Беҙ котлайык тыуыр яңы таңды,
Таңда тыуыр хеҙмәт улдарын,
Һәм арнайык ватан атаһына
Тәүге бокалдарҙың сыңлауын.

1939

# АЛЫҪТА КАЛҒАН ЭҘҘӘР

(Иҙел ярында таш тора. Шағир М. Ғафури был таш эргәһенә баҫып, „Өфө сәхрәләр“ен күҙәтергә яраткан)

Яр ташына киләм көҙ һайын;
Йә елләнеп ямғыр һибеләә,
Йә караңғы тымык төн була,
Йә ай нуры төшә Иҙелгә,
Яр ташына киләм көҙ һайын.

Бында торған шағир яңғыҙы,
Күңел күген кайғы каплаһа,
Йыр дауылы купһа йөрәктә,
Йә донъяһын онотоп шатланһа,
Бында торған шағир яңғыҙы.

Иҙел шаһит, Иҙел, сал Иҙел—
Шундай минуттарҙа койолған
Ауыр йәштәр, ут тамсыһы булып,
Ошо яр ташына уйылған.
Иҙел шаһит, Иҙел, сал Иҙел.

Баҫып торған ташка таянып,

Был Иҙелдәй тәрән мул ғөмөр,
Иркен дала һуҙыла алыҫка,
Ул далаға тиңдәш киң күңел
Баҫып торған, ташка таянып.

Мин эҙҙәрен эҙләп шағирҙең,
Баҫмаммы тип каты һағышты,
Ишетә алмаммы тип шул ерҙә
Күк йырына окшаш тауышты,
Мин эҙҙәрен эҙләп шағирҙең,

Яр ташына киләм көҙ һайын,
Йә елләнеп ямғыр һибелә,
Йә караңғы тымык төн була,
Йә ай нуры төшә Иҙелгә,
Яр ташына киләм көҙ һайын.

1940

———

## БЕРЕНСЕ ТАМСЫЛАР

Көн буйы тын торған һауала
Карылып болоттар кабара,
Түбәндән шаулашып, гөрләшеп,
Үттеләр бер төркөм карғалар.

Кояш та бөркәнсек ябынды,
Өйҙәрҙә тәҙрәләр ябылды,
Турғайым өйөнән сыкты ла
Комлокта йыуынып кағынды.

Ел бөгөн, хәбәрсе шикелле,
Ямғырҙың хуш еҫен килтерҙе,
Шунда ук япрактар битенә
Беренсе тамсылар һикерҙе.

1938

# САКЫРЫУ ТАУЫШЫ*

1

Беҙ теләйбеҙ иртәгә лә
Йәшәргә тыныс,
Ватан иминлеген һаклап
Ялтырай кылыс.

2

Йыракта, карлы тауҙарҙа,
Диңгеҙ артында,
Күлдәр, урмандар буйында,
Болот аҫтында
Йәшәүгә һыуһап йөҙәгән
Бар ине дуҫым,
Ул Мәскәү яғынан көттө
Өмөт, яҙмышын.
Ишетеп минең дуҫымдың

---

* Был шиғыр ак финдәр менән һуғыш көндәрендә яҙылғайны.

Сакырыу тауышын,
Туғандар уға қаратты
Нева ағышын.

3

Батырлык яраһыҙ булмаç—
Һуң ғәжәпме ни?
Мең ғөмөрҙө һаклау өсөн
Бер ғөмөр һүнеү.

4

Беҙ теләйбеҙ иртәгә лә
Йәшәргә тыныс,
Ватан иминлеген һаклап,
Ялтырай кылыс.

1940

---

## КҮРШЕМДЕҢ ТЕЛӘГЕ

Һуҙылып йәшел сирәмдә,
Кыяр кимереп ятабыҙ
Баксасы менән икәү.
Самосадканы көйрәтеп,
Тәмләп кенә гәп һатабыҙ
Баксасы менән икәү.
Минең күрше тыныс кына,
Бәләкәйерәк керпе саклы
Мыйығын һыйпап ала;
Һәм һораулы караш менән
Зирәк юлбарыҫ сыйфатлы
Борола миңә таба:
„Зәңгәр күҙҙәрҙе яҙаһың,
Буй зифа, каштар кара,
Һүҙем юк, бик шәп ул эш;
Но баш тирәләй уйлаһаң,
Беҙгә бына (хәтер кала)
Аҙырак төшә өлөш.
Был ничево, бына һин
Юкка агроном түгел.
Башлы малай—билдәле,
Бакса төҙөгән йылдарҙа

Сәйфиҙе сакырҙык—үҙһенгәс күңел,
Тик кайтманы ниңәлер...
Студенттарға эйәртеп,
Ул Нуруллаһын ебәрҙе,
Маһир икән сөгөлдөргә,
Һәр береһен анау мүкләк
Үгеҙ башылай, үҫтерҙе.
Ләкин
Теше үтмәне бүтән төргә.
Күрәһең, түтәлдәр таҙа
Күптән түгел утау уҙҙы,
Ә һеҙҙә? Тоже шулай?
Касан? Өсөнсө йыл?
Нык карағыҙ баксағыҙҙы,
Хәҙер эштәр ҙә уңай.

Бындайҙарҙы беҙ...—
Ул, Тимский
Шиғыры төҫлө, бармак буйы
Бер бөкөрө кыярҙы
Йылғаға карай томарҙы,—
Етлекмәгәндәр аҙ быйыл,
Почти бөтөр киләһе йыл.

Тәүге кыраузан бәлйерәп,
Йәки просто тыумыштан
Әгәр булмаһа йәме,
Һеҙ ҙә кәзәләрҙе һыйлағыҙ,
Сәйнәһендәр шатланышып,

Ә кешенең
Китмәһен ауыҙ тәме.
Зәңгәр күҙҙәрҙе яҙ әйҙә,
Кара кашын, зифа буйын,
Һүҙем юк—бик шәп ул эш.
Һеҙҙең уңыштан беҙгә лә,
Әйтеп кара, нисек булыр
Артарак төшһә өлөш?!“.

1940

---

## ДУҪТЫҤ ҮЛЕМЕ

Комсомоллык билетымды
Кулыма алған һайын
Хәтерләйем фронтташтың
Билетка тамған канын.
...Ташлы ярын йыуып аккан
Волганан алыҫ түгел
Һыңар пулянән киҫелде
Бер йәш һәм иптәш ғөмөр.
Сентябрҙең талғын елле
Күгелйем кисе ине,
Канлы кәүҙәгә тегәлеп,
Фронтовиктар баш эйҙе.
Ул ауыр һулап, түшенән
Комсо билетын алды,
Һәм билетының тышына
Тәңкә булып кан тамды.
Көҙгө япрактар шикелле,
Кипкән, хәлһеҙ иренен
Тын ғына кыймылдатты ла,
Беҙгә һуҙҙы билетын:
— Мин үләм... Ләкин уйҙарым
Һыя алмаҫ кәбергә.

Бына билет, дуҫтар, һеҙгә
Ҡалһын яҡты хәтергә...
Теләгем һеҙҙең йөрәктә,
Һамыҫым үҙем менән,
Үлем өсөн йәшәмәнем,
Ә йәшәү өсөн үләм...

1938

# ТУКАЙҒА

Якты көнгә сығып етә алмай,
Күмелеп калған шахтер шикелле,
Һөйгән монологын һөйләп бөтмәй,
Тынып калған актер шикелле,
Ағыуланған тынсыу караңғыла
Янып бөтмәй һүнгән шәм кеүек,
Сәхрәләге язғы йылға кеүек,
Ташты ла ул, тынды йәш егет.
Язғы кырау япрактарын бөргәс
Күкрәгән дә шиңгән гөл кеүек,
Иҫкелектең тынсыу һауаһында
Һулай алмай үлде йәш егет.
Дауыл алдындағы кара болот
Теләгәндәй айҙы капларға,
Иҫке тормош, Тукай, һинең данды
Теләне бит шулай таптарға.
Беҙ дауылдар булып, күгебеҙҙе
Кара болоттарҙан таҙарттык,
Беҙ—икенсе туфан,
Еребеҙҙе
Иҫкелектән йыуып яңырттык.
Тукай, йырың беҙҙең менән килде,

Йырың ялкын әле бөгөн дә,
Тукай, һин бит беҙҙең якты йондоҙ
Поэзияның зәңгәр күгендә.

1938

---

## КИЛ ИНДЕ

Сыйырсығым, кошсоғом,
Хәҙер бында кыш түгел,
Матурым, һин кил инде
Өйөң өлгөрҙө бөгөн.

Тәҙрәләре уйылған,
Ал, зәңгәргә буялған,
Сыйырсығым, һинең өсөн
Куныр тал да куйылған.

Канаттарыңды елпеп,
Асыл һайрауың һибеп,
Сыйырсығым, кил инде,
Өйөң әҙер бит инде.

1938

## ТУЛКЫНДАР

Апрель кисе зәңгәр пәрҙә тартты,
Төн һыйынды Иҙел битенә,
Акһыл айҙың тонок нурҙарынан
Көмөшләнеп тулкын һикерә.
Мин кәмәлә,
Шаян тулкындарҙың
Һикерешеүен карап барамын,
— Ишкәксе дуç!
Бик тиҙ алыçлаттың
Ярҙар менән беҙҙең араны.
Яҙғы Иҙел бөтөрөлөп аға,
Тулкын кәмәбеҙгә үреләә,
Канаттарын каккан һәр бер тулкын
Йәшлегемдәй матур күренә.

1936

# ТАНЫШ БУЛМАҒАН КУНАК

(Поэма)

Был поэмаһын таныш булмаған кыҙға бағышлай автор.

I

Шәүләләр оҙон һуҙылды
Көнсығыш якка таба,
Ерҙе еңел һалкын һыйпай,
Усакта уттар яна.

Салғы сыңдары тындылар,
Бик алыҫта, юғалып,
Эшсе кырмыҫка шикелле,
Таборға кайтты халык.

Бал корто һымак гөжләшкән,
Бик ҙур бер семья булды,
Йәм-йәшел балаҫ өҫтөндә
Киске аш уҙғарылды.

Оло ярканат булып, төн
Уйһыулыктан калкынды

Һунарға сыккан ябалак
Баш өҫтөндә талпынды.

— Әлли-бәлли—бәү,—килендәр
Бәпестәрен йоклата,
Гәп һуға ҙурҙар йыйылып,
Малайҙар тыңлап ята.

Ат ярыштыра берәүҙәр,
Берәүҙәр һөйләй бүре,
Берәүҙәр „күргәндәрем“ тип,
Борсакты яра эре.

Кайһылар хәтергә ала
Арыҫланбәк Мәргәнде,
Икенселәр хикәйә итә
Бик алыҫ үткәндәрҙе.

Усактар, ғәҙәттәгесә,
Төн йөҙөн һыйпанылар,
Кыуактар татыу йәшәүҙең
Һулышын тыңланылар.

***

Тонок ялкын яктыһында,
Яңғыҙ шәүлә һелкенде—
Разъезд юлы таборға
Ят кунак алып килде.

Әкиәт бүленде. Караштар
Килеүсегә ташланды.
Асык сырайҙар кунакты
Саф күңелдән каршы алды.

Ят кеше хәрби кейемдә,
Бер шпал петлицала;
Йылмайып көлгән сағында,
Алтын теш сағылып кала.

Был отпускной капитан
Ауылына кайткан сакта
Туктаны таборға, күреп
Юл буйында усакты.

— Арығанға окшайһың, егет,
Күрәһең, алыҫ ерҙән,
— Иминме йөрөгән яктарың?
— Ултыра кал әйҙә түрҙән!

— Якындан түгел,—ти кунак,—
Көнбайыш сиктән киләм,
Ә бына һаксы дуҫтарҙан
Һеҙгә күптин-күп сәләм.

— Кайҙа юл тоттоң, ир егет?
— Тыуған илемә кайтам,
Төнәр өсөн рөхсәт булһа...
Атларға әле байтак.

Карттар якты ут янынан
Хөрмәтләп урын бирә,
Йәш кыҙҙар ғәзеллек менән
Кунакка һый килтерә.

— Окшаһа, кымыҙ эс, егет,
— Юкә балы бик сибәр,
— Күңлең тартһа, әсе бал бар,
— Йәш ит һоғоноп ебәр.

„Күстәнәс“ тип папиросын
Кунак өләшеп бирә,
Ә үҙе янсыктан алып,
Яйлап тәмәке төрә.

Һәм катын-кыҙҙарҙан берәү
Бик тәрән һулап ала,
Бер кунакка, бер янсыкка
Карай ҙа, катып кала.

Катын бик нык тулкынланып,
Инеп китә сатырға.
Инде һуң, беҙҙең карттар ҙа
Һүҙ куҙғата ятырға.

Кунакка урын йәйҙеләр,
Табор йокоға талды,
Тик шағир йөрәге төҫлө,
Усактар көйрәп калды.

* * *

Романдың башын яҙғанда
Айлы итәләр төндө,
Ләкин был эпилог булғас,
Айҙы болоттар күмде.

Төн айһыҙ, ә ел тынғыһыҙ
Уята уҫактарҙы;
Турғайҙар таң һыҙылғансы,
Өй иткән кыуактарҙы.

Алыҫта аҙашкан өйрәк
Өҙөлөп кыскыра, меҫкен,
Төн караһында юл тапмай
Ул дуҫһыҙ булған өсөн.

Бойокма, иркәм, бойокма,
Шул коштар һыҙған юлдан
Эҙләп кайтыр йәшлек дуҫың,
Һин онотмаған булһаң.

Һүндермәҫ дуҫлык хистәрен
Тиҫтәләп үткән йылдар,
Айыра алмаҫ тәүге дуҫтан
Кош осоп етмәҫ юлдар.

Йөрәктәр тере калғанда
Мөхәббәт йәшәр һаман,
Йәшәргә теләүселәргә
Яңғыҙлык артык яман.

Бойокма, иркәм, бойокма,
Шул коштар һыҙған юлдан
Эҙләп кайтыр йәшлек дуҫын,
Һин онотмаған булһаң.

* * *

Укыусының эсе бошор:
„Бик күп һөйләйһең, малай,
Таныш түгел кунак менән
Таныштыр әле давай!"

Ояһы янында торған
Гүйә балаһыҙ кейек,
Иҙел ярына сығып баҫкан
Ул, башын түбән эйеп.

Һуң кунак нигә йокоһоҙ?
Һуң кунак нигә бойок?
Уйҙар, төн кеүек, болғансык,
Уйҙар, төн һымак, куйы.

Аҫта Иҙел ярҙарын игәй
Һәм тәрәнәйә кеүек,
Ләкин ул ғөмөрөн игәй,
Төбөн ком менән күмеп.

Йөрәктең тәүге яраһын
Саң капламаһа әгәр,
Ул һаман өңөлөр ине
Тәрән картлыкка кәҙәр.

Аҫта Иҙел. Тулкын бәүелеп,
Ярға һала канатын,
Төн йоколо, төн болотло,
Төндө йотоп, таң атыр.

Ә кунак нигә йокоһоҙ?
Ә кунак нигә бойок?
Уйҙар, төн кеүек, болғансык
Уйҙар, төн һымак, куйы.

***

Капыл сатырҙан сыға ла,
Ап-ак күлдәкле шәүлә
Оялсан аҙымдар менән
Кунакка таба килә.

Ул, гүйә энәле гөлгә
Һаклык менән кул һуҙа,
Һәм гүйә тәрән упкындан
Тар баҫма буйлап уҙа.

Акыл тойғоларҙы тыя:
„Нигә мин киләм әле?
Нигә билдәһеҙ кешегә
Серемде бирәм әле?“

Ак шәүлә артка сигенә,
Туктала, тағы атлай,

Сайкала, елдәр кайтарып,
Шәлен битенә каплай.

„Нигә юктан тартынырға,
Нигә мин калтырайым?
Ул таныш кешегә окшай,
Мин тик шуны һорайым.

А, әгәр ул аңламайса,
Минең һүҙемдән көлһә,
Ниндәй оят, мөхәббәтен
Тәкдим итә тип белһә...

Кит, улай уйламаҫ инде
Бер кирбес таккан кеше..."
Секундтарға кушылып үтте
Унын куркыныс хисе.

Бармағына урай, урай
Уймак шәленең суғын,
Ул якынлаша егеткә,
Баҫып күңел ярһыуын.

Тағы калтыранып китә,
Һалкын һыу койған кеүек:
— Кисер...—тауышы кыҫыла,—
Кисер һин уйлы егет.

Юлсы йәшен караш ташлай,
Бышылдау килгән якка,

Шул вакыт саткылар сәсеп,
Болот шартлай йыракта.

Ни күрә, әллә төшмө был?
Әллә тик хиял уйнай?
Юк, беҙҙең кунак һаташмай,
Юк, беҙҙең кунак уяу.

Ул күрә: баяғы катын,
Кыйыуһыҙ килә якын,
Тынысһыҙ, йәшһеҙ күҙҙәрҙән
Бөркөлә дымлы ялкын.

Ул күҙҙәр йәшлек яҙының
Сафлығын йыйып калған.
Ул күҙҙәр кара төндәрҙең
Караһын юйып алған.

Әйтерһең был һулыш хәҙер—
Һүнергә торған күбек,
Тик күҙҙәр кайнар ғөмөрҙө
Һыуытмай һаклар кеүек.

Катын һүҙен дауам итә:
„Йокоһоҙ үтте төнөм,
Нишләнем? Ғәфеү ит, егет,
Мин былай түгел инем.

Мин туры һөйләйем, юлсы,
Төпһөҙ уй йотто бөгөн,

Капланы һеҙҙең күләгә
Тыныс күңлемдең күген,

Әллә мин һеҙҙе калала
Урамда күреп калдым?
Әллә поезд, пароходта,
Әллә бер трамвайҙа барҙым?!

Әллә тик һеҙҙең менән мин
Бары бер һыуҙы эстем,
Бер төрлө һауаны һулап,
Бер күк аҫтында үҫтем.

Нигә өндәшмәйһең, юлсы?
Борсоном буғай килеп,
Кәйефеңде боҙҙом, буғай,
Тәмле уйыңды бүлеп...“

„Кәйефем якшы, һөйөклөм,
Ана йәшен йыракта,
Хәтерләйем үткәндәрҙе
Йәшен уйнаған сакта.

Тартынмағыҙ, ултырығыҙ,
Һеҙ теләһәгеҙ әгәр,
Һөйләйем, тик бүлдермәгеҙ
Һүҙҙең һуңына кәҙәр“.

Ләкин автор артығырак
Телгә бөткәнгә күрә,

Кунак һөйләсәк нәмәне
Ул үҙе һөйләп бирә:

II

Батша куян бүрек менән
Японды кыуған йылды,
Күрше өйҙәрҙә, күрше таңда
Йәштәш балалар тыуҙы.

Нәфисә семья күленең
Тәүге аккошо ине,
Илгиҙәр—Торна Мәргәндең
Кәҙерһеҙ оя төбө.

Тормош башлаған семьяға
Һөйөргә курсак тыуҙы,
Ә картлығында Мәргәнгә
Бер артык корһак тыуҙы.

Япон диңгеҙен быуырға
Кәүҙәләр кәрәк булған,
Кыҙ атаһын кыҙыл вагон
Кайтмаҫка олактырған.

Тол әсәне айнытмаҫлык
Һағышлы итте кыҙы,
Балкырға ла өлгөрмәйсе,
Һүнде бәхет йондоҙо.

Кыскыра, поезд кыскыра,
Әсә эсен бошора,
Тигеҙ ғөмөр иткән сакты
Иҫкәйенә төшөрә.

Ул кайтмаған...

* * *

Асыуланған бесәй һырты төҫлө,
Тауҙар... тауҙар, кайын, карағай;
Урман шомло, урман артык кара—
Нур ҙа үтмәй япрак аралай.

Шул тауҙағы барлык кейектәргә
Батша булып Мәргән көн күргән—
Һәр бер куян уға бүрек теккән,
Һәр бер төлкө һалып тун биргән.

Камышлы күл куйы камышында
Бала үҫтерткән әсә өйрәктән.
Айыу еккән.
Һәм ул Илгиҙәрен
Айыу кеүек әрһеҙ өйрәткән.

* * *

Собар йылдар, талсыккан ат төҫлө,
Баткаклы юл буйлап тартылған,

Шашкан бүре булып, ун өс тапкыр
Ғинуар сыккан тауҙар артынан.

Иҙел шаулап ташкан ун өс тапкыр,
Кайнап киткән Иҙел боҙҙары,
Ун өс тапкыр, ап-ак киндер сайкап,
Боҙ оҙаткан ауыл кыҙҙары.
Һәм йәштәштәр үҫкән...

***

Кускыл йәшел бөркәнсеген
Елләтеп йылы елгә,
Йәш килен төҫлө, яҙ килде,
Сәскәләр һибеп ергә.

Көн яртылаш күҙен аскас,
Канатын каға-каға,
Бер әсә каҙ алып бара
Бәпкәләрен йылғаға.

Каҙ менән бергә тора ла
Мәргән мылтығын яһай,
Карт дейеүҙәй дөп-дөп баҫып,
Тауҙарға карай атлай.

Тәү башлап яланға сыккан
Азат байталдар һымак,
Тыныс Мәргәндең артынан
Йәштәштәр бара уйнап.

Йәштәштәр бара уйнап,
Зәңгәр аландар буйлап.

Илгиҙәр әбәк бирә лә,
Нәфисә уны кыуа.
Илгиҙәр таштар ырғыта,
Нәфисә сәскә йыя.

Үтәләр тәрән сокорҙан
Һәм сытырман ерҙәрҙән
Үтәләр. Пар күгәрсенгә
Донъя күрһәтә Мәргән.

Балалар һыуһап йөҙәйҙәр,
Баштарға эҫе каба,
Шул сак Мәргән тау аҫтынан
Бер һалкын шишмә таба.

Көмөш шишмә. Ятып эскәс,
Ултырып кыҙыл ташка,
Ата йәшәү серен һөйләй
Күпте күрәсәк башка:

„Бына шишмә. Ете кат ерҙең
Аҫтынан ағып сыға.
Көҙрәте бар, кеүәте бар,
Таштарҙы ярып сыға.

Шул ауыр юлдарҙы үтеп,
Көн яктылығын күрә,

Һуғара аҫыл гөлдәрҙе,
Бәндәләргә һыу бирә.

Ҙур диңгеҙҙәргә кушыла,
Бер көмөш тамсы булып;
Унын өҫтөндә туктылып,
Хәл алып китә болот.

Шишмәләй ит һин ғөмөрөңдө,
Тайсанып баҫма ергә,
Үлемдән түбән—
Баш эйеү
Ғәйрәте булған иргә!

Кеүәтең бар. Тауҙы актар,
Намыҫ эше өсөн ян,
Бүленгәнде бүре ашар,
Ир булһаң—илгә таян!"

Мәргән, кулын кашка куйып,
Күҙләне алыҫ күкте,
Һәм гүйә айыу атланған
Йәшлеге сабып үтте.

Шул сак бала хиялында
Якын йәшен уйнаны—
Аҡбуҙат булып, киләсәк
Осортоп китте уны.

Яландар өҫтөнән
Көкөртлө ел иҫте,
Елләнеп, яуымлап,
Дауыллап көҙ етте.

Илдәге ҙур пожар
Тау яғын ялманы;
Аттылар, бүлделәр
Мирзаның малдарын.

Байҙар мулланы
Аҙандан төшөрмәй;
Ни булыр дальше?
Мужиктар төшөнмәй.

Киләләр погондар,
Уҙалар атлылар,
Үтәләр йондоҙҙар
Уларҙың артынан.

* * *

Көндәр бик собар уҙҙылар,
Куркыулы тыуҙы таңдар.
Яҙғы кыраулы иртәлә
Ауылды баҫты актар.

Май сүлмәктәре бушаны,
Тауыкты кырҙы үләт,

Кыҙҙарҙың намыҫын таптап,
Һалдаттар үтте геүләп.

Был иртә күптәр яҙмышын
Көл итте. Бына Мәргән
Шул йәрәбәгә эләкте
(Мирза ояһын теткәндә
Ул юлды башлап йөрөгән).

Илгиҙәрҙең күҙ алдында:
Әремле сокор буйы,
Атаның башһыҙ кәүҙәһе,
Дәһшәтле пәрей туйы.

Теҙләнгән дә каткан бала,
Кәүҙәһеҙ башты косоп,
Канға йәбешеп укмашкан
Ак һакалының осо.

Ирендәр күгәреп туңған,
Каш куйы, маңлай яҫы.
Әллә тилерәме бала?
Был бит атаның башы!

Ах, кәүҙә! Боғаз киҫелгән,
Тау төҫлө ята тыныс;
Ергә ағып кан ойған...
Хәтерләтмә—куркыныс!

Илгиҙәрҙең күҙ алдында:
Камсылар, итек... тағы...
Баштан айырҙы кәүҙәне
Бер мыйыклы, бер погон.

Бит кисә ул бөркөт атты
Һәм атлап килде бая,
Мыйыклы йөҙгә төкөрҙө,
Ә хәҙер... хәҙер кайҙа?

Ул кәүҙә өҫтөнә ауҙы,
Гүйә быуыны һынды;
Үкһене, оҙак үкһене,
Кыскырҙы—капыл тынды.

Һуңын хәтерләмәй бала,
Дөм караңғыға батты,
Кояш оялып караны,
Ә әремдәр баш какты.

Еңел болоттар ябынып,
Кис килде йырак юлдан;
Сәстәрҙе һыйпап үттеләр
Ниндәйҙер изге кулдар.

Һалкын бармактар һак кына
Эҫе маңлайға төштө;
Илгиҙәр күҙҙәрен асты,
Әкиәт батыры төҫлө.

Нәмә бар? Бала акылын
Кайғы йокоһо йоткан.
Нәфисә, ергә теҙләнеп,
Уның маңлайын тоткан.

Юк, был һис һаташыу түгел—
Ул көндөҙ бында килде;
Шул ук кәүҙә, канлы һакал,
Тик ул иламай инде.

Башты нескә кулдар тоткан,
Ҙур кара күҙҙәр карай,
Илгиҙәрҙе назлай улар,
Аңламай, нисек улай?

Куркып ағарған Нәфисә
Куҙғата ирендәрен:
„Һин инде иламайһың бит,
Эйе бит, Илгиҙәрем!

Минең дә атам кайтманы—
Мин дә атаһыҙ бала;
Илаһаң кыйын була шул,
Илгиҙәр, һин илама.

Кайтып әсәйеңде йыуат,
Ул бит һушһыҙ йығылған,
Ер тырнап һине сакыра
Һыуһаған кара юрғаң“.

Йәштәштәр атлап киттеләр
Койон һукмағы буйлап,
Бала акылына һыймаҫ
Кот оскос уйҙар уйлап.

Күгелйем бушлык тирә як,
Йыракта тауҙар ауа;
Кем уртаклашыр яҙмышын,
Кем юлдаш булыр уға?

* * *

Илгиҙәр был вакиғаны
Төш һайын кабатланы
Кемдер каты кулдар менән
Боғазын быуып, уны

Башһыҙ кәүҙә эргәһендә
Типкеләп алып килде,
Ул яна, юк бер тамсы һыу,
Ут ялмап ала илде...

Сеү...
Яғымлы кулдар тағы
Маңлайҙы кыҫып тота,
Һалкын һулыш кайта кабат,

Ул бар ғазапты онота
Һәм һикереп тора.

Торһа бөркөү өй,
Тышта ай йөрөй.

Болғансык иҫтәлектәргә
Өмөтлө нурҙар сәсеп,
Нәфисә йылмайҙы, һөрттө
Илгиҙәрҙең күҙ йәшен.

Илгиҙәр үҙ акылында
Тиң итте яҙмыштарҙы,
Дауылдар аша яктырҙы
Тәүге мөхәббәт яҙы.

* * *

Унан һуң күп болот аккан,
Асык күк йөҙөн каплап;
Иҫәпһеҙ һалдаттар уҙған,
Был урамдарҙы таптап.

Йәшенле кис килде бер сак,
Һауала ут уйнатып,
Эскадрон керҙе ауылға,
Һикертеп, ат уйнатып.

Йәшәү маршы аҫтында
Эскадрон менән бергә
Беҙҙең кунак хәтерләгән
Ут яуған шушы төндә

Йәшендәр һыҙып күрһәткән
Билдәһеҙ йырак юлға
Илгиҙәрҙе алып китте
Эйәрле кара юрға.

Илгиҙәр был күкрәгендә
Дәрт һәм көс һаклап бара,
Йөрәгендә офицерға
Һүнмәҫ үс һаклап бара.

Башта уй, ата васияты:
„...Тайсанып баҫма ергә,
Үлемдән түбән—
Баш эйеү
Ғәйрәте булған иргә...“

Баҫыу капкаһын сыкканда
Йөрәкте өҙгөс тауыш
Капыл уйҙарҙы бүлдерҙе.
(Был тауыш артык таныш)

— Илгиҙәр... ах, Илгиҙәрем!..
Тукта көт, көтсө мине!..
Был—хәлһеҙ, һулышы бөткән
Йәшле Нәфисә ине.

Кара юрғаны туктатып,
Егет эйәрҙән төштө.
Йәш кыҙ косакка ташланды,
Атылған аккош төҫлө.

Бына тәүге һәм һуңғы кат
Кайнар ирендәр аша
Ике йәш йөрәк үҙенең
Кайнарлығын алмаша.

Һулышһыҙ рәхәтлек эсендә
Татлы минуттар уҙа;
Нәфисә һуңғы бүләген—
Кайыған янсык һуҙа.

Егет эйәргә һикерә,
Алға оса кара юрға,
Ә Нәфисә йәш аралаш
Карай ул киткән юлға.

Болоттар ярыла күктә
Төн йөҙөн телә ялкын,
Ерҙә йәш кыҙ—кем йыуатыр,
Кем итер уны якын?

* * *

Гел алға барҙы эскадрон
Еңеү, дан менән,
Йәшәү яуланы эскадрон
Кан, корбан менән.

Күп һыуҙар кисте эскадрон,
Үтте күп ерҙе,

Һуңғы дошманды эҙәрләп,
Кавказға керҙе.

III

Тревогалы Кавказ кисе—
Кайнашып шаулай йылға,
Олай тауҙарҙа шакалдар,
Куна бөркөт каяға.

Карлуғас ояһы төҫлө,
Ярға сәпәлгән сакля,
Акһыл төтөнгә күмелеп,
Яңғыҙ усак үрләтә.

Юлсыларҙы ер иҙәнгә
Кырған да һалған йоко,
Төштө лә ғазаплы итә
Ах, был йылдарҙың уты!..

Ыңғырашалар, кыскыралар,
Һүгенәләр, көләләр,
Тештәрен шыкырҙаталар,
Туктауһыҙ юткерәләр.

Кара бесәй күҙе төҫлө,
Төнлөктән карай йондоҙ,
Усакты көйрәтә егет,
Каҙанды бутай йәш кыҙ.

Аттар бышкыралар тышта
(Таң ямғыр вәғҙә итә)
Усак эргәһендә икәү
Дуҫтарға аш өлгөртә.

Кыҙ—кипарис. Кара диңгеҙ
Ярының даны икән.
Егет—йырак, йырактағы
Уралда үҫкән имән.

Кәмәрҙең (шулай ине кыҙ)
Бәллеүе булған тулкын,
Диңгеҙ ярһыу күңел биргән,
Һәм кояш биргән ялкын.

Тауҙарҙан алған ғорурлык,
Нәфислек алған гөлдән,
Уйсанлык алған таңдарҙан,
Шаянлык алған көндән.

Каяның кырағый кыҙы
Ике ай инде бына
Йәшәй, дан булып эскадронға,
Матурлык биреп уға.

Кәмәр туғаны уларҙың,
Һәм иң якын иптәше,
Ә егетме? Ул—Илгиҙәр
Бик күптән таныш кеше.

Кара бесәй күҙе төҫлө;
Төнлөктән карай йондоҙ;
Усакты көйрәтә егет,
Каҙанды бутай йәш кыҙ.

Бик оҙак куйырып торҙо
Тыныслык—көйһөҙ кунак,
Тик һуҙылдылар караштар,
Кояшлы ямғыр һымак.

Илгиҙәр өндәште кыҙға:
— Һин белһәң ине, Кәмәр,
Йәшерҙем һинән, үҙемдән
Бөгөнгө көнгә кәҙәр...

Илгиҙәр тынды, оялды,
Калтырап китте тәне,
Ә Кәмәрҙең түбән карай
Сәнселде керпектәре.

Инде ул усак көйрәтмәй,
Бутамай каҙанды кыҙ,
Тик төнлөктән һаклык менән
Үрелеп карай йондоҙ.

Янсык сығара Илгиҙәр,
Тәмәке төрөү өсөн,
Һәм капыл үҙ акылында
Юғалтып ташлай үҙен.

Кулында кайылған янсык:
Кыҙыллы, күкле дебет,
Һәр биҙәк аша Нәфисә
Үпкәләп карай кеүек:

„Шулмы боҙолмаç вәғҙәләр?
Шулармы татлы өмөт?
Нигә тындың? Кайҙа намыç,
Йөрәгең кайҙа егет?“

Аш өлгөрҙө. Халык торҙо.
Шаулашып аш ашалды;
Һәм борсоулы тынлык тағы
Һалмак канатын һалды.

Кәмәрҙә йөрәк ярһыуы.—
Уның әйтәһе килә:
„Бойокма, иркәм Илгиҙәр,
Кәмәр бит һине һөйә“.

Тышта ямғыр, дөбөр-дабыр
Сакля балсығын йыуа;
Илгиҙәр, талсыккан килеш,
Хәлһеҙ күҙҙәрен йома.

Төш үткән йәшәүгә кайта:
... Бына тышта иртә яҙ,
Ә улар Нәфисә менән
Ултырта куш алмағас.

Күҙ асып йомған арала,
Ак сәскәгә ябынып,
Куш алмағас күкрәп үҫә,
Күккә тейерҙәй булып...

... Һәм капыл серле бушлыкта
Ком мәмерйәһе буйлап,
Нәфисә шәүләһе килә,
Шашып, үкереп илап.

Сәстәре йолконған унын,
Кулында якты факел,
Ялкынды битенә һирпеп,
Факелды уйната ел.

Ул үкһеүенән тынды ла,
Бөркөткә хас көс менән,
Ыласынға хас тиҙлек менән,
Һуһарға хас үс менән

Илгиҙәр аяғы аҫтына
Тоткан факелын атты,
Ут һүнмәне. Ә таш катыш
Кара ком эреп акты.

Әрнеүле нәфрәт менән ул:
„Был ут бит—минең бәғер,
Иркәләп яндырҙын үҙең,
Мә таптап һүндер хәҙер!..“

## IV

Беҙҙең таныш түгел кунак
Кесәнән янсык алды:
„Бына янсык. Бөгөнгәсә
Намыҫым кеүек һакланды".

Нәфисә ни кисергәндер—
Беҙгә ул кыҙык түгел;
Нәк бына ошо вакытта
Таң йыуҙы июнь күген.

## ЭПИЛОГ

Ауылдаштарына кунак
Үҙен танытты иртән:
Ул—хәбәрһеҙ ғәйеп булған
Мәргән малайы икән.

Илгиҙәр үҙе яулаған
Тормошто күрә кайткан,
Һәм бында тәүге һөйөүҙең
Емерек эҙҙәрен тапкан.

Был осорашыуҙың һуңы,
Беләм, кыҙык тойолор.
Дауам итер шул ук моңдо
Киләсәктә яңы йыр.

1939—40

## ПРОЛЕТАРИАТ ШАҒИРҘӘРЕНӘ ХАТ

(В. В. Маяковский)

Иптәштәр,
рөхсәт итегеҙ,
позаһыҙ
һәм маскаһыҙ—
Олорак һәм акыллы
иптәш булып, мин
Һөйләшәм һеҙҙең менән,
иптәш Безыменский,
Иптәш Светлов,
иптәш Уткин.
Беҙ даулашабыҙ,
курғашлауҙы һорай тамактар,
Беҙ эстрада еңеүҙәренән
тонсоғабыҙ.
Ә минең
һеҙгә, иптәштәр,
эшлекле тәкдим бар:
Әйҙәгеҙ
күңелле,
обед корабыҙ,

Түшәйбеҙ аҫка
коверлы комплименттарҙы,
Кемдең теше оҙон—
тешен кыркабыҙ.
Луначарский
тараткан
лавр веноктарҙы
Иптәштәрсә
уртак һурпаға кушабыҙ.
Хәл иттек,
үҙебеҙсә дөрөҫ
бөтәбеҙ,
Үҙ тауышы менән
йырлай
һәр кеше!
Шөһрәттең
уртак тауығын киҫәбеҙ,
Һәм һәр кемгә
бирәбеҙ
тип-тигеҙ өлөштө.
Ташлайык
бер-беребеҙгә
шпилька каҙауҙы,
Үҫтерәйек
һүҙҙәрҙең
гүҙәл ажурын*.
Ә касан минә

* Үтә күренеүсән юғары сыйфатлы тукыма.

иптәштәр һүҙ бирә—
Мин һүҙҙе алам
һәм әйтәм шуны:
— Мин күренәм һеҙгә
ҙур артлы

академик булып,
Имеш, бер мин
ирешә алмаҫлык
поэзияның жрецы.
Ә миңә ысындан да
берҙән бер кәрәк:
Күп булһын шағирҙәр
якшыһы
һәм төрлөһө.
Күптәр файҙалана
напостовец булыу менән
Якшырак атау өсөн
үҙҙәрен,
— Имеш, беҙ берҙән-бер,
беҙ пролетариаттыкы.
Ә мин, һеҙҙеңсә,
валютчикмы—кем?
Мин аҫылда
һөнәрсе, туғандар,
Мин был
күңелһеҙ фәлсәфәне
яратмайым улай,
Еңдәрҙе һыҙғанам

эшләрҙәме,
hуғышырғамы
Рәхим ит,
йә, давай!
Беҙҙең алда
бик ҙур
эштәр бар,
Шиғырсылык кәрәк
һәр кемгә,
Әйҙәгеҙ
тиргә батқансы
эшләргә,
Сыйфатты якшыртыу
һанды күтәреү өҫтөндә.
Мин шиғыр сорттарын
коммуна менән
үлсәйем,
Шуға ла
коммунаны
һөйә йөрәк,
Сөнки коммуна,
минеңсә,
сикһеҙ бейеклек,
Сөнки коммуна,
минеңсә,
иң тәрән тәрәнлек.
Ә поэзияла
юк
дуҫ та, туған да

Протекция менән
бәйләнмәҫ
рифма ебе,
Калдырайык
орден һәм награда бүлеүҙе,
Ташлайык, иптәштәр,
ярлык сәпәүҙе
Теләмәйем
мактанырға,
әйтеп яңы фекер,
Минеңсә—
авторса һауаланмай әйтәм—
Коммуна—
шул,
кайҙа чиновниктар бөтөр,
һәм кайҙа
күп булыр,
йыр һәм шиғыр.
Етә иҫ китеү
бер пар рифмаға—
Беҙ хөрмәтләйбеҙ:
был шағир—гений.
Береһен атайҙар
кыҙыл Байрон тип,
Икенсеһен—
кып-кыҙыл Гейне.
Бер нәмәнән куркам
һеҙҙең өсөн мин дә—

Күңелдәр беҙҙең
вакланмаһын,
Күтәрмәйек беҙ
коммунизм бейеклегенә,
Раешник яҫылығын
һәм частушка сафсатаһын.
Күңелдәр бер беҙҙең,
үҙегеҙ аңлайһығыҙ:
Йөрәк һыҙығында
юк бүленеш,
Әгәр һеҙ беҙҙең өсөн,
ә беҙ
һеҙҙең менән булмаһак,
Шайтанымамы ни
беҙгә ул эш!
Ә әгәр мин
бер сак
һеҙҙе һүкһәм,
һәм һеҙгә
һелтәнһә
перо—кулым,
Уны мин, билдәле,
кан менән яуланым,
Мин һеҙҙән күп
рифма юндым.
Иптәштәр,
ташлайык
торгаш кылыкын,

— Минең, имеш, поэзия
минең лапаҫ,
Мин нәмә эшләнем—
бөтәһе һеҙҙеке—
Рифмалар,
темалар,
дикция,
бас!
Дандан капризлырак,
көллөрәк
нәмә бар?
Аламмы ни уны
үлгәс гробка?
Төкөрәм мин, иптәштәр,
һуңғы сиктә,
Аксаға, шөһрәткә
һәм башка калдык-боҫтокка!
Ниңә беҙгә
булергә
поэтик власты?
Йыяйык
һүҙҙәрҙең
камсылыһын һәм нескәһен.
Әйҙәгеҙ,
көнсөлөкһөҙ
һәм фамилияһыҙ
Коммуна төҙөлөшөнә һалабыҙ
һүҙҙәр кирбесен.
Әйҙәгеҙ

иптәштәр,
тигеҙ атлайык,
Кәрәкмәй безгә
сыңлаусы
пләш париктар.
Ә һүгешергә теләһәк—
дошмандар күп
Кыҙыл баррикаданың
теге яғында.
1926

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


| | бит. |
|---|---|
| Яҙғы тауыш | 3 |
| Тыуған ерҙә | 5 |
| Таң ине | 8 |
| Төн тураһында уй | 13 |
| Осорашыуҙар | 16 |
| Ай юлы | 19 |
| Балалык | 20 |
| Даһи телмәре | 21 |
| Йыр | 23 |
| Айырылыу | 25 |

* * *

| | |
|---|---|
| Алыҫта калған эҙҙәр | 28 |
| Беренсе тамсылар | 30 |
| Сакырыу тауышы | 31 |
| Күршемдең теләге | 33 |
| Дуҫтың үлеме | 36 |
| Тукайға | 38 |
| Кил инде | 40 |
| Тулкындар | 41 |
| Таныш булмаған кунак (поэма) | 42 |
| Пролетариат шағирҙәренә хат | 71 |

Яуаплы редактор: *Ш. Кильдияров*
Тех. редактор: *Р. Рахимов*
Корректор: *Ахтямова һәм Муратов*
Художнигы: *Р. Гумиров*

Наборға бирелде 17/III-41 й. Баҫырға кул куйылды 9.4.41. Кағыҙ $60 \times 92^1/_{32}$ Күләме $2^1/_2$ Табак. табакта 40960 хәреф. П—386 .Заказ № 880. Тираж 2000.

Окт. Нат. типографияһы, Өфө, Володарский урамы, 2

КНИГА ДОЛЖНА БЫТЬ
**ВОЗВРАЩЕНА НЕ ПОЗЖЕ**
указанного здесь срока

| | |
|---|---|
| 166 2/III | 283 7/XII |
| 632 4/XII | 399 6/III |
| 159 27/IV | 186 19/XII |
| 69 7/V | 15633 2/I |
| 10 15/IV | 92 7/III |
| 251 29-IV | 37390 28/XII |
| 371 14/VI | 1928 23/II |
| 45 23/III | |

Колич. предыд. выдач.——————

Тип. „Моск. железнодор.“ Зак. 594

Хаҡы 1 һум 50 тин

М. КАРИМОВ

# ВЕСЕННИЕ ГОЛОСА

(На башкирском языке)

12

ПРОВЕРЕНО
07 СЕН 2016
Подпись